# Аҡҡош йыры



*Ишембай районының Янрус ауылында тыуған Фәүзиә Рәхимғолова балалар һәм ололар өсөн ижад иткән шиғырҙары, поэмалары, хикәйәләре, йырҙары менән башҡорт әҙәбиәтендә яҡты эҙ ҡалдырған билдәле шағирә. Уның әҫәрҙәре ышандырыу көсө, мауыҡтырғыс булыуы, ябайлығы һәм тапҡырлығы менән айырылып тора.*

*Яҙыусы яҡташтарын бер саҡта ла онотманы. Ғүмеренең, ижадының һуңғы көндәренәсә улар араһында булды, тормош-яҙмыштары менән ҡыҙыҡһынып йәшәне. Районына, тыуған ауылына, төйәгенең ер-һыуына, бигерәк тә кешеләренә булған йөрәк һүҙен әҫәрҙәрендә сағылдырҙы. Түбәндә беҙ уның күренекле шағир һәм әҙәбиәт ғалимы Вафа Әхмәҙиев тураһында иҫтәлеген тәҡдим итәбеҙ.*

Аҡҡош үҙ ғүмерендә бары бер генә тапҡыр, үлер алдынан ғына, йырлай икән, тигән инаныу йәшәй халыҡ күңелендә. Тәбиғәтте өйрәнеүсе ғалимдарҙың, аҡҡош йыры уйлап ҡына сығарылмаған, ысынлап та, үлемесле йәрәхәт алған ҡоштоң һуңғы һулыш алыуы йыр булып ағыла, тигән һүҙҙәре лә хәтергә төштө бөгөн.

Шағир Вафа Әхмәҙиевтең ижад күктәренә һуңғы осошон, һуңғы ынтылышын, һуңғы батырлығын да мин, шуға оҡшатып, «Аҡҡош йыры» тип атаным. Уның менән яҙыусыларҙың ижад йортонда — Пицундала булырға тура килде миңә. 1983 йылдың апрель айында булды был. Вафаның һуңғы ижад уты шунда балҡыны.

Һуңғы балҡыш! Мин уны үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, үҙ күңелем менән тойҙом. Уйлап ҡараһаң, аяныс та, ғәжәп тә. Шағир тәүге тапҡыр ғына килгәйне бит диңгеҙгә. Бында ул яңынан тыуғандай булды: үҙенең һыҙланыуҙарын да онотто, алҡымынан быуып алған ғазраилды ла ҡыуып ебәрҙе. Уның әле бейек күпергә менеп, әле ярға баҫып, икһеҙ-сикһеҙ зәңгәр киңлеккә, диңгеҙҙең ажғырып бер-береһен ҡыуышҡан сал тулҡындарына ҡарап таң ҡалып тороуы һаман да күҙ алдымдан китмәй.

— Хәҙер мин бында йыл һайын килермен, — тигәйне ул тәүге көндө үк, ныҡ тәьҫирләнеп.

Вафаның диңгеҙҙе, көньяҡтың гүзәл тәбиғәтен яҡын күреүе үҙенә генә хас ятатыу ине. Бер нисә көн эсендә ул уның тарихын да, әллә ниндәй мөғжизәләрен дә өйрәнеп алды, грузин, абхаз кешеләре менән дә дуҫлашып өлгөрҙө. Рица күленә ойошторолған экскурсиянан да ифрат дәртләнеп, тулҡынланып ҡайтты. Һәр көн, эшләп арығандан һуң, йәйәүләп хәтһеҙ ер урап сыға торғайны Вафа. Миңә лә яҡындағы бер-ике абхаз ауылын, ундағы ят үҫемлектәрҙе күрһәтеп йөрөнө. Ижад йортондағы яҡут, үзбәк, татар яҙыусылары менән аралашырға ла ваҡыт тапты ул.

— Исмаһам, әҙерәк ял ит инде, ҡустым, саҡ ҡына ла ит ҡунмай бит үҙеңә, — тип әйтеп ҡараһам да булманы. Хатта һуңғы көндә лә әле төшкә тиклем эшенән айырыла алманы. Ай-һай, нисегерәк белә ине ул минуттарҙың ҡәҙерен. Вафа ғалим аҡылына ла, шағир хыялына ла эйә булыуы, үҙенең тәртибе, һөйләшкәндәге фекер тәрәнлеге, иғтибарлылығы, ябайлығы, алсаҡлығы, йылы итеп йылмайыуы менән дә шул ҡыҫҡа ғына ваҡытта ла кешеләрҙең ихтирамын яулаңы.

Ижад йортондағы аҙаҡҡы көнөнөң икенсе яртыһында ғына ул, ысын ял итеүсе һымаҡ, дәртле йөрөнө. Иң сыныҡҡан ир-егеттәр менән бер рәттән диңгеҙҙең һалҡын ҡосағына сумып, йөҙөп сыҡты. Тулҡын өҫтөндә тирбәлгән аҡсарлаҡтарҙан күҙен ала алманы. Ҡараңғы төшкәс тә, айға ҡарап, диңгеҙ шауын тыңлап, оҙаҡ баҫып торҙо яр буйында. Кем уйлаһын инде, был уның диңгеҙ менән мәңгегә хушлашыуы булған икән тип.

Хәҙер Вафаны хәтерләһәм — диңгеҙ, диңгеҙҙе хәтерләһәм — Вафа күҙ алдыма килеп баҫа. Йөрәк әрней — уны юғалтыу үтә ауыр булды. Әммә шундайын да саф күңелле, аҡыллы, үтә лә эшмәкәр, кешеләргә, Ватанына йөрәгендә оло һөйөү йөрөткән яҡташымдың күңелем төпкөлөндә йондоҙҙай балҡып ҡалған яҡты һыны һәр саҡ ғорурлыҡ хисе уята. Инде уның үҙенең шиғыр юлдары менән:

Әжәлдән ҡалған бәндә юҡ,
Әммә ерҙә зат ҡала:
Изге рухы илдәр гиҙә,
Үҙе гүрҙә ятһа ла, —

тип кенә һөйләргә ҡалды.

Уның китаптары — ғалим һәм шағир Вафа Әхмәҙиевтың халҡына, дуҫтарына әйтеп ҡалдырған һуңғы йөрәк һүҙҙәре, һуңғы ялҡынлы сәләме ул.

***Фәүзиә Рәхимғолова,***
*1994 йыл.*

